**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**МКУ Отдел образования МР Аскинский район РБ**

**МБОУ СОШ д.Кунгак**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| Методическим объединением учителей | Заместитель директора по УВР | Директор |
| ________ Фаершина Г.Я. | ________Муфазалова А.Ф. | ________ Шарифисламов Б.Н. |
| Протокол №1 от «28» 08 2023 г. | Протокол №1 от «28» 08 2023 г. | Приказ №38 от «28» 08 2023 г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

учебного предмета
«Башкирский как государственный язык Республики Башкортостан»
для 7-9 классов основного общего образования
на 2023-2024 учебный год

**д.Кунгак 2023**

**Аңлатмалы яҙыу**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.

Эш программаһы 34 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 1 сәғәт), календарь буйынса 32 сәғәт.

Дәреслек: Башҡорт теле. Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2011.

Программа кимәле : базис.

Уҡытыусының тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты :

1. Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.
2. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
3. Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-8-се кластары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.
4. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт (дәүләт) теле буйынса уҡыусыларҙың телмәр үҫтереүенә, яҙма эштәренә, дәфтәр тотоуҙарына һәм яҙма эштәр үткәреүгә берҙәм талаптар. (Протокол №4, 13 ғинуар 2010 йыл)

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:**

Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2011.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы**: Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М., Усманова М.Г. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Башҡортостан Республикаһы  Мәғариф министрлығы тарафынан тәкдим ителгән программа Көнгәк  урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһынынҫ “ уҡыу планына” ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
3. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Маҡсаттар һәм бурыстар:**

1. Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
2. Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
3. Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
4. Башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, милли йолалары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре, уларҙың эшмәкәрлеге, ижады һәм башҡалар менән таныштырыу, балаларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Текстағы яңы һүҙҙәр, фразаларҙы аңлатыу, һүҙлек эше үткәреү мотлаҡ.
5. Әҫәрҙе өлөшләп, һайлап, ролдәргә бүлеп, сылбыр буйынса уҡыу, тексты магнитофон яҙмаһынан тыңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү кеүек эштәр башҡарғанда, һүҙлек эше иғтибар үҙәгендә тора.
6. 5-6-сы кластарҙа алған белемдәр тулыландырыла. Темалар буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу, диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә.

7. Туған тел, белем, укытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлык тураһында һөйләшеү күберәк урын ала.
8. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башкарыла.

**Укытыу предметының төп йөкмәткеһе**

I. Яңынан мәктәпкә (6 сәғәт)    5-6-сы кластарҙа алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар укыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, укытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлык тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башкарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен алып тора.  Мәктәп, укыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәкәлдәр, әйтемдәр, йомактар менән танышыу.  Грамматика:  6-сы класта үтелгәндәрҙе кабатлау. Мәктәпкә. (6 сәғәт)

II. Ауыл тормошо (7 сәғәт)   Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң кала тормошонан айырмалы яктары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыккан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр укыу. Грамматика:  Ҡылым. hүҙбәйләнеш. hөйләм төҙөлөшө.

III. Башкортостан буйлап сәйәхәт (8 сәғәт)  Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе кабатлап, белгән фактик материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү. Был тема буйынса укыусыларға яңы мәғлүмәт биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башкортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар мәғлүмәттәре менән таныштырып китеү («Арҡайым», «Сынташты», боронғо ҡалалар, алтын әйберҙәр табыу һ.б. тураһында), бының өсөн һуңғы йылдарҙа сыккан матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеү. Был тема буйынса тәкдим ителгән әҫәрҙәр менән танышыу, укыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш алып барыла.  Грамматика:  Яңғыҙлык исемдәр.

IV. Спорт. Спорт кәрәк-ярактары (9 сәғәт)   Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала укыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Укыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыкһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү. Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыклы кешеләр.   Грамматика:  Башкорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәре.

V. Мин һәм беҙҙең ғаилә (9 сәғәт)   Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп кенә урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.   Грамматика:  Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше.

VI. Әсәйҙәр байрамы. (3 сәғәт)    Әсәй, өләсәйҙәрҙең изгелеге, ҡәҙере хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, йөкмәткеһе өҫтөндә эш төрҙәре башҡарыу, һүҙлек байлыктарын арттырыу. "Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы тураһында әңгәмәләр, иртәлектәр үткәреү, данлыҡлы ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашыуҙар ойоштороу. VII. Сәнғәт оҫталары. (7 сәғәт)   Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.

VIII. Исемең матур, кемдәр ҡушкан? Исемдәрҙә - ил тарихы (3 сәғәт)   Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары мөнән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.   «Исемдәрҙә – ил тарихы», «Исемең матур, кемдәр ҡушкан?» темаһына иртәлектәр үткәреү, уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтерергә, кеше алдында сығыш яһау өсөн ярҙам итәсәк.

IX. Борон-борон заманда... (5 сәғәт)   Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк.

X. Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ (5 сәғәт)   Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуслыҡ, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә  һәм  һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған  әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойоштороу.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

7 класс өсөн телмәр күнекмәләре:

1. Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен белеү;
2. Яҙыусы ижад иткән художестволы картиналарҙы уйлап күҙ алдына баҫтырыу;
3. Эпик һәм лирик әҫәрҙе айыра белеү;
4. Программала ятлау өсөн тәкдим ителгән әҫәрҙәрҙең тексын ятлау, 8-10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
5. Художестволы, фәнни популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу;
6. Художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
7. Ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү.
8. Йәмғиәт тормошонда телдең роле; туған телдең әһәмиәте;
9. Фонетика, телмәр өндәре, ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр;
10. Графика, алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыуы төшөнсәләре;
11. Лексика; һүҙҙең лексик мәғәнәһе; һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синоним, антоним, омоним;
12. Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
13. Ҡылымдарҙың заман, һан, зат менән үҙгәреше;
14. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың яҙылышы, һөйләмдәге роле.
15. Ижади диктанттар, изложениелар һәм иншалар яҙыу.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

1. башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
2. тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
3. дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;

4. һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
5. тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәкдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:    Контроль күсереп яҙыу- 4.

**Башҡорт (дәүләт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар**

1. Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2007.

2. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.

3. Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-8-се кластары өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.

4. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн. – Өфө: Китап, 2009. – 128 бит.

5. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт (дәүләт) теле буйынса уҡыусыларҙың телмәр үҫтереүенә, яҙма эштәренә, дәфтәр тотоуҙарына һәм яҙма эштәр үткәреүгә берҙәм талаптар. (Протокол №4, 13 ғинуар 2010 йыл)

6. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.

7. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.

8. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видео әсбаптар.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.

9. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» укытыу – методика үҙәге, 2008.

10. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. Ураҡсин З.Г. – Өфө, 2004.

11. Русса-башҡортса һүҙлек. Ураҡсин З.Г., Саяхова К.Г. – Өфө, 1997.

12. Омонимдар һүҙлеге. Әхтәмов М.Х. – Өфө, Китап, 2006.

13. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Ураҡсин З.Г. – Өфө, Китап, 2006.

14. Башҡортостан энциклопедияһы. Шәкүров Р.З. – Өфө, Китап, 1997.

15. Балалар әҙәбиәте антологияһы. Әлибаев С. – Өфө, Китап, 1999.

16. Электрон дәреслек. Башҡорт (дәүләт) теле. 5-11 – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.

17. Электрон дәреслек. Башҡорт әҙәбиәте. 5-9 класс – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.

18. Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. – Өфө: Педкнига, 2008. – 96 бит

19. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.

Материаль-техник ҡулланмалар

1. телевизор;

2. компьютер;

3. принтер;

4. DVD-проигрыватель,

5. Аудио-видеомагнитофон.

Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт

1. Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-се синыф укыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. һ.б. – Өфө: Китап, 2008

2. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.

3. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.

4. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса укыйым – Өфө: Китап, 2007.ә

5. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

6. Балалар уйын фольклоры. Сөләймәнов А.М. – Өфө, Китап, 2007.

7. Балалар өсөн йөҙ йыр. Юнысова Г.А. – Өфө, Китап, 2003

8. «Башҡортостан укытыусыһы», «Йәншишмә», «Аҡбуҙат», «Аманат», «Йәшлек» гәзит-журналдары.

9. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008

Мостай Кәрим ижадында милли тәрбиә нигеҙҙәре. Вәлиев И.И. – Өфө, Китап, 2005.

**Календарь - тематик планлаштырыу 7 класс**

| № | Тема | Дәрестәр һаны | Дәрес төрө | Үткәрелеү датаһы | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Фактик | Планлашты рылған |
| | **Яңынан мәктәпкә.** | **4** | | | |
| 1 | М. Кәрим “Уҡытыусыма”.VI класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | Ҡабатлау | 01.09. | |
| 2 | Б.Бикбай «Туған тел”. | 1 | Ҡабатлау | 08.09. | |
| 3 | Контроль күсереп яҙыу “Көҙ”. | | Контроль эш | 15.09. | |
| 4 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | Ҡабатлау | 22.09. | |
| | **Ауыл тормошо.** | **3** | | | |
| 5 | Икмәк үткән юл. | 1 | Яңы тема | 29.09. | |
| 6 | Алтын башаҡтар. Һөйләм. | 1 | Яңы тема | 06.10. | |
| 7 | Мәктәп ашханаһында. Һөйләм төҙөлөшө. | 1 | Яңы тема | 13.10. | |
| | **Башҡортостан буйлап сәйәхәт** | **3** | | | |
| 8 | М.Кәрим. Башҡортостан. Исем. | 1 | Яңы тема | 20.10. | |
| 9 | Урал. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. | 1 | Яңы тема | 27.10. | |
| 10 | Тәбиғәт һәйкәлдәре. Тыуған ил, Ватан тураһында мәҡәлдәр. | 1 | Яңы тема | 10.11. | |
| | **Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары.** | **3** | | | |
| 11 | Спорт – ул һаулыҡ. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. | 1 | Яңы тема | 17.11. | |
| 12 | Беҙҙең ғаилә ярышта. Тексты өлөштәргә бүлеү. | 1 | Яңы тема | 24.11. | |
| 13 | Һаулығың – байлығың. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | Яңы тема | 01.12. | |
| | **Мин һәм беҙҙең ғаилә.** | **5** | | | |
| 14 | К.Шафиҡова “Әсәй күҙҙәре”. | 2 | Яңы тема | 08.12.<br>15.12. | |
| 15 | Контроль күсереп яҙыу “Әсәй». | 1 | Контроль эш | 22.12. | |
| 16 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | Ҡабатлау | 29.12. | |
| 17 | Ғаилә, ата-әсәләр тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Ҡылым тураһында үткәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | Ҡабатлау | 12.01. | |
| | **Әсәй, әсәкәйем…** | **2** | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 18 | Ф.Рәхимғолова “Беҙҙең әсәй”. | 1 | Яңы тема | 19.01. | |
| 19 | Й.Солтанов “Ҡәнәфер сәскәһе”. | 1 | Яңы тема | 26.01. | |
| | **Сәнғәт оҫталары.** | **2** | | | |
| 20 | Мәшһүр бейеүсе Рәшиҙә Туйсина. | 1 | Яңы тема | 02.02. | |
| 21 | Башҡорт халыҡ бейеүҙәре. | 1 | Яңы тема | 09.02. | |
| | **Исемең матур, кемдәр ҡуйған?** | **4** | | | |
| 22 | Исемдәрҙә – ил тарихы. | 1 | Яңы тема | 16.02. | |
| 23 | Боронғо башҡорт исемдәре. | 1 | Яңы тема | 01.03. | |
| 24 | Контроль күсереп яҙыу. | 1 | Контроль эш | 15.03. | |
| 25 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | Ҡабатлау | 22.03. | |
| | **Борон-борон заманда.** | **2** | | | |
| 26 | Ирәндек. | 1 | Яңы тема | 05.04. | |
| 27 | Ф.Туғыҙбаева “Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?” Кластан тыш уҡыу. | 1 | Яңы тема | 12.04. | |
| | **Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ** | **5** | | | |
| 28 | Ш.Бикҡол “Тыныслыҡ кәрәк”. | 1 | Яңы тема | 19.04. | |
| 29 | К.Кинйәбулатова ”Дуҫтарым күп”. | 1 | Яңы тема | 26.04. | |
| 30 | Р.Мөхәммәтов “Тауышһыҙ Талип”. | 1 | Яңы тема | 03.05. | |
| 31 | С.Әлибай “Ҡайын һыуы”. | 1 | Яңы тема | 17.05 | |
| 32 | Контроль күсереп яҙыу. | 1 | Ҡабатлау | 24.05. | |

**Аңлатмалы яҙыу.**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә 8-се класс өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.

Эш прогаммаһы 34 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 1 сәғәт), календарь буйынса **32** сәғәт.

**Дәреслек:** Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8- се класс уҡыусылары өсөн дәреслек.- 3-сө баҫма , яңыртылған – Өфө: Китап, 2012.

**Программа кимәле :** базислы

**Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**

Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн .Башҡорт теленән программа.– Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Ғәбитова З.М. Уҡытыу рус телендә алып барған мәктәптәрҙең 7- 8- се кластары өсөн “Башҡорт теле” дәреслегенә методик күрһәтмәләр. - Өфө:Китап, 2006. – 152 бит.

Усманова М.Г., Габитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы: 5-11 класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма.-Өфө: Китап, 2009.- 168 бит.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:** Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8- се класс уҡыусылары өсөн дәреслек.- 3-сө баҫма , яңыртылған – Өфө: Китап, 2012.

**Программа кимәле :** базислы

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:**

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I- IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М., Усманова М.Г.- Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Көнгәк ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Программаның үҙенсәлеге 66-сы һәм 67-се дәрестәрҙә бирелгән “Хаталар өҫтөндә эш” һәм ”Йәшел алтын.Үтелгәндәрҙе ҡабатлау” темалары берләштерелгән.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошка ашырыла:**

1. «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
2. Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
3. Башҡортостан Республикаһының “Мәғариф тураһында” Законы;
4. Башҡортостан Республикаһының “Уҡытыу һәм тәрбиә биреү” концепцияһы;
5. Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;

- телдең системаһын ( фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
- бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Рус һәм башҡа мәктәптәрҙә телде белмәгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла. Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
3. Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Тематик план**

| № | Тема | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Мәктәпкә барабыҙ | 3 |
| 2 | Көҙө эштәр һәм көҙгө күренештәр | 3 |
| 3 | Өфө менән танышыу | 4 |
| 4 | Хеҙмәт төбө - хөрмәт | 2 |
| 5 | Ҡыш дауам итә | 4 |
| 6 | Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры | 4 |
| 7 | Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! | 4 |
| 8 | Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп | 3 |
| 9 | Ай Уралым, Уралым... | 5 |

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**Мәктәпкә барабыҙ (3 сәғәт).**

Был тема буйынса 7 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау, һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү. Текст өҫтөндә эшләү,план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо һ.б. хаһында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап тураһында мәҡәлдәр ҡойоу. класта үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.

**Көҙө эштәр һәм көҙгө күренештәр ( 3 сәғәт)**

Көҙгө үҙгәрештәрҙе бергәләп күҙәтеү, кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар уҡыу. Синтаксис. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Логик баҫым. Исем менән ҡылымды ҡабатлау.

**Өфө менән танышыу ( 4 сәғәт )**

Өфө - башҡортостандың баш ҡалаһы. Өфө ҡалаһы, уның үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә үткәреү. Уның иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, һүрәттәр ҡарау. Һөйләм телмәрен үҫтереү. Рефераттар яҙҙырыу һәм уны класс алдында ҡыҫҡаса һөйләтеү кеүек эштәр ҡулланырға мөмкин. Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө. Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның биреләше.

**Хеҙмәт төбө - хөрмәт ( 2 сәғәт )**

Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, тигән темаға әңгәмә ҡороу. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары менән осрашыу ойоштороу. Уҡыусыларға ниндәй һөнәр оҡшауы тураһында һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Хеҙмәт, һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы. Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәләре.

**Ҡыш дауам итә ( 4 сәғәт )**

Ҡыш миҙгеле тураһында белгәндәрҙе системалаштырыу, һүҙлек байлығын арттырыу кеүек эштәр ентекле алып барыла. Ҡыш тураһында текстар, шиғырҙар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу яңы йылға бағышланған йырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр. Яңы йыл менән ҡотлау открыткаһы яҙырға өйрәнеү. Уҡытыусы һайлаған текст буйынса изложение яҙыу. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры ( 4 сәғәт)**

С.Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Уның шиғырҙарын ятлау, шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә ойоштороу. С.Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙан төрлө ижади эштәр эшләтеү. ( һүрәттәр төшөрөү, инша яҙыу, стенгәзит сығарыу)һ.б. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре тураһында төшөнсә. Аныҡлаусы.

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! ( 4 сәғәт )**

Яҙ миҙгеле тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Яҙғы байрамдар- 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тултырыусы.

**Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп ( 3 сәғәт )**

Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы. Ветерандарға, батырҙарға ҡарала ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Данлыҡлы кешеләр менән кисәләр, осрашыуҙар ойоштороу. Хәл. Һүҙлек менән эш күнек мәләре үткәреү.

**Ай Уралым, Уралым...(5 сәғәт )**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре тураһында диолог һәм монологтар төҙөү. 8 - се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

“Мәктәп” темаһы буйынса һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөү. Текст өҫтөндә эшләү, план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо, уҡыу әсбаптары, китапхана, беҙҙең класс тураһында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап һ.б. мәҡәлдәр ҡойоу.

1. Тәҡдим ителгән ситуация буйынса һорауҙар бирә белеү, уҡытыусының (йәки башҡаларҙың) һорауҙарына яуап бирә белеү; яуаптарҙы дөрөҫ интонация менән асыҡ, аңлайышлы итеп әйтеү, һөйләү, бирелгән һорауҙарға тулы итеп яуап биреү, күренекле яҙыусыларҙың биографияһы , ижады өҫтөндә ентекле эш алып барыу.
2. Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.
3. Ҡысҡырып, шыма, ролләп, сәхнәләштереп һәм тасури уҡыу.
4. Һүҙлек һүҙҙәрен белеү һәм уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
5. Дәрестә өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү.
6. 80- 85 һүҙ күләмендә диктант яҙыу; 55-60 һүҙ изложение һәм 65-70 һүҙ инша яҙа белеү; ҡотлау хаты (открытка) яҙа белеү.
7. Башҡортостан, унын үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре тураһында диолог һәм монологтар төҙөү. 8- се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
8. Программала күрһәтелгән шиғырҙарҙы яттан белеү; 3-4 башҡорт йырын башҡара белеү, мәктәптең үҙешмәкәр сараларында ҡатнашыу, сәхнәлә сығыш яһау. Бөтә был эштәр тураһында бәйләнешле һөйләй белеү. Данлыҡлы кешеләр менән кисәләр, осрашыуҙар ойоштороу уларға ҡарала ихтирам, ғорурланыу тойғоһо уятыу, кешелеклелек тәрбиәләү.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- ижади эштәр башҡарыу(төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙыу, нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып яҙыу);
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- бирелгән тексты өлөштәргә бүлеү, исемләү, план төҙөү, план буйынса йөйләү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

